# Вариант -2

## БАШҠОРТ ТЕЛЕНӘН **берҙәм** **региональ имтихан**

### Эште башҡарыу буйынса күрһәтмә

Имтихан ике өлөштән, 25 эш төрөнән тора. Беренсе өлөш 24, икенсе өлөш 1 эш төрөнән тора.

Башҡорт теленән имтихан эштәрен башҡарыу өсөн 3,5 сәғәт (210 минут) ваҡыт бирелә.

1-24 эш төрөнә яуапты цифр (һан) йә һүҙ (бер нисә һүҙ) менән яҙыу ҡаралған, һорауҙың яуабына ҡарап, цифр йә һүҙҙе бер-бер артлы яҙыу талап ителә. Яуапты эш тексының яуабы тигән асыҡ урынға яҙығыҙ, ә һуңынан №1 яуап бланкыһына түбәндә бирелгән өлгө буйынса күсерегеҙ.

Яуап:

| А | Б | В | Г | Д |
|---|---|---|---|---|
| *5* | *2* | *6* | *1* | *3* |

| 7 | 5 | 2 | 6 | 1 | 3 | | | | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|

Яуап: <u>килтерергәбарырға</u>

| 9 | к | и | л | т | е | р | е | р | г | ә | б | а | р | ы | р | ғ | а |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|

Яуап: <u>124</u>

| 14 | 1 | 2 | 4 | | | | | | | | | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|---|

2-се өлөштөң 25-се эш төрө уҡылған текст буйынса инша яҙыуҙы үҙ эсенә ала. Был эш төрө №2 яуап бланкында башҡарыла.

Бөтә БРИ бланктары сағыу ҡара ҡара менән тултырыла.

Эш төрөн башҡарғанда, ҡаралама менән ҡулланырға рөхсәт ителә. Эште баһалағанда, ҡараламала яҙыуҙар баһаланмай.

Һеҙҙең тарафтан башҡарылған эш төрө өсөн алынған балдар ҡушыла. Күберәк эш төрҙәре башҡарырға тырышығыҙ һәм күберәк балдар йыйығыҙ.

***Уңыштар теләйбеҙ!***



1-се өлөш

**1-24 –се эш төрҙәренә цифр (һан) йә һүҙ (бер нисә һүҙ), цифрҙарҙың (һан) бер-бер артлы булыуы яуап булып тора. Яуапты эш тексының яуабы тигән асыҡ урынға яҙығыҙ, ә һуңынан №1 яуап бланкыһына эш төрөнөң номерынан уңға, беренсе шаҡмаҡтан башлап, *<u>буш урын ҡалдырмай, өтөр һәм башҡа өҫтәмә символдарһыҙ яҙығыҙ.</u>* Һәр хәреф йә цифрҙы бланкыла күрһәтелгән өлгө буйынса айырым шаҡмаҡтарға яҙығыҙ.**

**Тексты уҡығыҙ һәм 1-3-сө эш төрҙәрен башҡарығыҙ.**

**Ватаным**

(1)Ватаным минең йөрәгемдә ниндәй ҙә булһа айырым өлөштәре менән түгел, ә үҙенең бөтә киңлектәре, тәҫ-буяуҙары, бөтә дәүерҙәре, үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән йәшәй. (2)Ватанды өлөштәргә, киҫәктәргә бүлеп яратыу мөмкинме һуң?

(3)Тауҙарҙағы йәшен йәшнәүе лә, сабый бала көләүе лә, далалағы яңғыҙ убала, республикам өҫтөндә елберләгән өс төҫлө байраҡ та – улар бөтәһе лә минең Ватаным.

(4)Ватаным тиһәк, ергә уны үҙҙәренең эш-фекере менән биҙәү өсөн килгән, [ ] әллә күпме байлыҡтар ҡалдырып киткән ата-бабаларыбыҙҙы күҙ алдына килтерәбеҙ. (5)Ватан тиһәк, беҙ хәтер, мөхәббәт һәм хыялды аңлайбыҙ.

(6)Уның үткәндәре менән ғорурланам, хәсрәтләнәм дә мин, бөгөнгөһөн яратам, киләсәге тураһында тулҡынланып уйлайым. *(М.Кәримдән)*

1 Текста булған ике мөһим һөйләмде билдәләгеҙ. Ул һөйләмдең номерын яҙығыҙ.

(1) Ватаным минең йөрәгемдә ниндәй ҙә булһа айырым өлөштәре менән түгел, ә үҙенең бөтә киңлектәре, тәҫ-буяуҙары, бөтә дәүерҙәре, үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән йәшәй.

(2) Ватанды өлөштәргә, киҫәктәргә бүлеп яратыу мөмкинме һуң?

(5) Ватан тиһәк, беҙ хәтер, мөхәббәт һәм хыялды аңлайбыҙ.

(6) Ватанымдың үткәндәре менән ғорурланам, хәсрәтләнәм дә мин, бөгөнгөһөн яратам, киләсәге тураһында тулҡынланып уйлайым.

Яуап:

| | |
|---|---|
| | |

2 4-се һөйләмдә ниндәй һүҙ (һүҙ теҙмәһе) төшөп ҡалған? Шул һүҙҙе яҙығыҙ.
1) был донъяла;
2) ата-бабаларыбыҙ;
3) ил яҙмышы;
4) изге тойғо

Яуап:
___________________________________

3 *үткәндәре менән ғорурланам* һүҙенең дөрөҫ тәржемәһен аңлатҡан һүҙҙәрҙе уҡығыҙ һәм 6-сы һөйләмдә ҡулланылған һүҙҙәрҙең дөрөҫ мәғәнәһен билдәләгеҙ. Түбәндә килтерелгән аңлатманан шул мәғәнәгә тап килгән һанды күсереп яҙығыҙ.
1) горжусь прошлым;
2) наша гордость;
3) гордость за прошлое;
4) с гордостью за прошлое

Яуап:

4 Түбәндәге һүҙҙәрҙең береһендә баҫым ҡуйылышында хата ебәрелгән, шул һүҙҙе айырып яҙығыҙ.
малайҙАР
баллАр
яуАп
ҡОштар

Яуап: _________________________

5 Һөйләмдәрҙең береһендә билдәләнгән һүҙ лексик мәғәнәһе яғынан дөрөҫ ҡулланылмаған. Лексик хатаны төҙәтегеҙ. Алыштырған яңы һүҙҙе яҙығыҙ.
Бишенсе көн ямғыр ЯУА.
Әйткән һүҙ – АТҠАН уҡ.



ТӘҮГЕ һәм икенсе рәттәге уҡыусыларҙың ярыш һөҙөмтәләре бер тигеҙ булды.
Йылы КӨНДӘР башланды.

Яуап: _________________________

6 Һүҙҙәрәрҙең береһендә ялғауҙар яҙылышында хата бар. Хатаны төҙәтеп, һүҙҙе дөрөҫләп яҙығыҙ.
1) малайҙар, уҡыусылар;
2) көндәр, урмандар;
3) таулар, яланлар;
4) өҫтәлдәр, китаптар.

Яуап: _________________________

7 1-се бағаналағы грамматик хаталарға тап килгән һөйләмдәрҙе билдәләгеҙ. 1-се бағаналағы һәр позицияға икенсе бағаналағы позицияны күрһәтегеҙ.

| Грамматик хаталар | Һөйләмдәр |
|---|---|
| А) эйә менән хәбәр араһында бәйләнеш юҡ | 1) Ҡурай үҫә ҡайын урманы һәм аралаш урмандарҙа ҡуйы үлән араһында. |
| Б) һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе боҙолған | 2) Кешене хеҙмәт тәрбиәләй сынығтыра рухи яҡтан байыта. |
| В) тиң киҫәкле һөйләмдәрҙә хата | 3) Бер һай ғына урынға еткәс бабай минең ҡулдарымды, битемде йыуҙырҙы. (М.Кәрим) |
| Г) айырымланған хәл әйтеме булған һөйләмдә хата | 4) Мин һеҙҙең фекерегеҙ менән Килешкәндәр. |

Таблицаға тап килгән һөйләмдәрҙең һандарын хәрефтәр аҫтына яҙығыҙ.
Яуап:

| А | Б | В | Г |
|---|---|---|---|
| | | | |

8 Е хәрефе ике өндө белдергән рәт һүҙҙәрен күсереп яҙығыҙ.

бейеү, белем, сейә
стена, текст, балет
етәү, ел, елкән, ер
арена, телевизор

Яуап: ________________________

**9** Бер үк хәрефтәр төшөп ҡалған рәт һүҙҙәрен билдәләгеҙ. Төшөп ҡалған хәрефтәрҙе өҫтәп, һүҙҙәрҙе күсереп яҙығыҙ.

1) бор…с, томб…йоҡ, бол…т, ҡ…рос
2) ҡ…лыс, ҡый…ҡ, ыс…ҡ, кит…п
3) ашх…на, икм….к, аҡс…, аҡҡ…ш
4) к…гәрсен, …лән, б….рәнә, һанд….ғас

Яуап: ________________________

**10** Төшөп ҡалған хәрефтәр урынына Ы хәрефе яҙылған һүҙҙе күсереп яҙығыҙ.
артист…н
Минск…ҙан
митинг…ла
Калиниск…ҙа

Яуап: ________________________

**11** Дөрөҫ яҙылған рәттәге һүҙҙе күсереп яҙығыҙ.
киоскта
киоскыла
киоскелә
кискала

Яуап: ________________________

**12**



Ҡушма исемдәрҙең яҙылышында нәҙек айырыу билдәһе (ь) төшөп ҡалған һүҙҙе күсереп яҙығыҙ.
Гөл…йыһан;
Гөл…емеш;
мең…япраҡ;
Аҡ…яр.

Яуап:________________________

**13** Һөйләмдәрҙә билдәләнгән һүҙҙең ҡайһыһы ҡушылып яҙыла. Ҡушылып яҙылған һүҙҙе күсереп яҙығыҙ.
Йылға БУЙҘАРЫН (ДА) үҫкән әрем, еләк, шалфей, ҡарағай, сейә сәскәләренән шифалы еҫ аңҡый.
Ул тылсымлы кеҫәнән төмле-томло нәмәләр һис бер ВАҠЫТТА (ЛА) өҙөлмәй.
Фәһим шишмәне ырғып СЫҠТЫ (ЛА) эре генә атлап китеп тә барҙы.
Бел: бер генә ҡырын ЭШ (ТӘ) фашланмай ҡалғаны юҡ.

Яуап: ________________________

**14** Ялғау ҡушылғанда ТТ яҙылған һүҙҙе күсереп яҙығыҙ.
артист
шрифт
Брест
башҡорт

Яуап: ________________________

**15** **Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ.** Бер өтөр ҡуйылған ике һөйләмде билдәләгеҙ. Ул һөйләмдәрҙең номерҙарын яҙығыҙ.
1) Батыр үҫмерҙәргә әйтерһең ҡул болғай хәйерле юл теләй ине. (Л.Абдуллина).
2) Бөгөн балаларҙы ла ата-әсәләрҙе лә ҙур сара көтә.
3) Көнһылыу әлегә ундай уҡ уңышҡа өлгәшә алғаны юҡ әммә күнекмәләр еңел бирелә. (Т.Ғарипова).
4) Малайҙар йә көрәште йә туп типте йә йүгерҙе.

Яуап:

| | |
|---|---|
| | |

16 **Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ.** Билдәләнгән һүҙҙәрҙең ике яғында ла өтөр ҡуйылған ике һөйләмдең номерҙарын яҙығыҙ.

1) Эт ул балаҡайым белгең килһә, бик аҡыллы януар ул.
2) Урман юҡ икән ерҙең йәме-күрке юҡ. (Н.Мусин)
3) Бала саҡтан да саф яҡты бәхетле минуттар буламы икән?(Ф.Рәхимғолова)
4) Шундай йырҙар була уларҙы тыңлағандан-тыңлағы килә.

| | |
|---|---|
| | |

17 **Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ.** Һөйләмдәрҙә һандар урынына һыҙыҡ ҡуйылған һөйләмдәрҙең номерын айырып яҙығыҙ.
1) Ышанам (1) йырҙарыбыҙ мәңге йәшәйәсәк!
2) Ватанды һөйөү(2) атаңды һөйөү.(С.Ғәләүетдинов).
3) Бөгөн балаларҙы ла (4) ата-әсәләрҙе лә ҙур сара көтә.
4) Үҙ илем (3) алтын бишек.

Яуап:

| | |
|---|---|
| | |

18 **Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ.** Һөйләмдә нөктәле өтөр ҡуйылған цифрҙы күсереп яҙығыҙ.
Әгәр тәбиғәтте һаҡлауға һәр беребеҙ өлөш индерһә (1) тирә –яҡ күпкә таҙараҡ буласаҡ (2) әгәр балаларҙы бәләкәйҙән быға өйрәтһәк (3) тормош матур буласаҡ.

Яуап:

| |
|---|
| |

19 **Тыныш билдәләрен ҡуйығыҙ.** Һан урынына ике нөктә ҡуйылған ике һөйләмдең номерҙарын яҙығыҙ.
1) Халҡым йыры (1) мәңгелек йыр.
2) Ул бик күп халыҡ йырҙарын белә (2) “Уйыл”, “Шәүрә”, “Зөлхизә”, “Ғилмияза” һ.б.
3) Концерт дауам итте (3) башҡорт халыҡ йырҙары йырланды, ҡурай моңо ағылды, халыҡ бейеүҙәре башҡарылды.



4) Рухығыҙ һынмаған (4) иң яҡшыһы шул. (Н.Мусин)

Яуап:

| | |
|---|---|
| | |

**Тексты уҡығыҙ һәм 20-25-се эш төрҙәрен башҡарығыҙ**

Еребеҙҙең йәшел биҙәге

(1)Башҡортостан ерен ысын мәғәнәһендә “Урал ынйыһы” тип әйтергә була. (2)Уның тәбиғи байлыҡтарының айырылғыһыҙ өлөшө – урмандар. (3)Республикабыҙҙа урмандар 5,5 миллион гектар майҙанды биләй һәм уның запасы 0,6 миллиард кубометр тәшкил итә. (4)Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, урмандың муллығы күп урындарҙа уның менән һаҡсыл эш итмәүгә, тәбиғәткә вайымһыҙ ҡарауға алып килә.

(5)Бөйөк рус ғалимы Д.И.Менделеев шундай һүҙҙәр яҙып ҡалдырған: “Урал – Азия менән Европаның тәбиғи сиге. (6)Унан күп йылғалар башлана, уларҙың ҡайһы берҙәре Волга, икенселәре Обь яғына юл ала. (7)Көньяҡҡа ла Урал күп һыу бирә. (8)Шуның менән Урал оло майҙанда йәшәгән халыҡтың тормошон тәьмин итә, күпме файҙа килтерә. (9)Урал урмандарын бөтөрһәк, тауҙар ғына яланғас ҡалмаç, миллиондарса халыҡ һәм улар йәшәгән төбәк ҙур зыян күрер. (10)Һис шикһеҙ, был урмандарға ҡағылырға ярамай”.

(11)XIX быуатта әйтелһә лә, күренекле ғалимдың төрән мәғәнәле фекере бөгөн айырыуса әһәмиәтле. (12)Сөнки беҙҙә әллә нисә миллион кубометр ағас әҙерләнә, ләкин был эштә тейешле талаптар үтәлмәй.

(13)Урманды һаҡсыл файҙаланыу, уны ишәйтеү – бөгөнгө көн үҙәгендәге бурыстарҙың береһе. (14)Урмандарҙы һаҡлау – тимәк, еребеҙҙең йәшел юрғанын, тупрағыбыҙҙың уңдырышлығын, һулаған һауабыҙҙың сафлығын, бер һүҙ менән әйткәндә, йәшәгән мөхитебеҙҙе һаҡлау ул. *(“Мәктәп календары” нан)*

20 Тексттың йөкмәткеһенә ниндәй фекер тулыһынса тап килә? Яуаптың номерын яҙығыҙ.
1) Урман кешегә торлаҡ йорттары һәм ҡаралтылары өсөн ағас биреүе тураһында яҙа.

2) Урманды еребеҙҙең йәшел биҙәге булыуы тураһында яҙа. Урманды һаҡлау - изге бурысыбыҙ.
3) Урмандағы ағастарҙың саф кислород сығарыуын белдерә.
4) Урман кешеләрҙең тормошон матурлауын һөйләй.

Яуап:

| | |
|---|---|
| | |

21 Һаналып кителгән раҫлауҙарҙың ҡайһыһы дөрөҫ? Яуаптарҙың номерҙарын яҙығыҙ.
1) 1-се һөйләмдәге фекер 2-3-сө һөйләмдәрҙә дауам итә.
2) 12-се һөйләм 11-се һөйләмдең йөкмәткеһен аса.
3) 14-се һөйләм 13-сө һөйләмгә ҡарата ҡапма-ҡаршы мәғәнә тыуҙыра.

Яуап:

| | |
|---|---|
| | |

22 8 -9-сы һөйләмдәрҙә антоним һүҙҙәрҙе табып яҙығыҙ.
Яуап: ________________________

23 11-13-сө һөйләмдәрҙә теркәүес ярҙамында бәйләнгән һөйләмдәрҙең һанын яҙығыҙ.

Яуап: ________________________

*24-се эш төрөн башҡарыу өсөн тәҡдим ителгән текст нигеҙендә яҙылған рецензиянан фрагмент уҡығыҙ.*
*Был фрагментта тексттың тел –һүрәтләү үҙенсәлектәре ҡарала. Рецензияла ҡулланылған терминдар төшөп ҡалған. (А, Б, В, Г, Д, Е) төшөп ҡалған һандар урынына исемлектәге тап килгән терминдарҙы яҙығыҙ. Таблицала һәр хәреф аҫтына тап килгән һанды яҙығыҙ.*
*Һандарҙың бер-бер артлы килеүен №1 ЯУАПТАР БЛАНКЫҺЫНДА 24 эш төрөнөн уңға табан, беренсе шаҡмаҡтан башлап, буш урынһыҙ, өтөрһөҙ һәм өҫтәлмә символдарһыҙ яҙығыҙ.*
*Һәр бер цифрҙы өлгө бланкыһындағы талаптарға яраҡлы яҙығыҙ.*

24



Автор республикабыҙҙың тәбиғи байлығының күләмен күрһәтеү өсөн А__________________ (“ 5, 5 миллион, 0,6 миллиард” 2-се һөйләмдә) ҡуллана. Унан күп йылғалар башланыуын белдереү өсөн Б_________________ “Волга, Обь” 6-сы һөйләмдә, “Урал” 7-се һөйләмдә) ярҙамында тормошҡа ашыра. Уралдың кеше тормошон тәьмин итеүен В_________________ “файҙа” 8-се һөйләм, “зыян” 9-сы һөйләм) һүҙҙәр ярҙамында дәлилләй. Халыҡ йәшәгән төбәктең ҙур зыян күреүен асыҡлау өсөн Г_________________ (“улар” 9-сы һөйләмдә) ҡуллана. Күренекле ғалимдың фекеренең әһәмиәтлеген Д _________________ (“сөнки” “ләкин” 12-се һөйләмдә) ярҙамында аса. Йәш быуынға урманды һаҡлауҙың мөһимлеген аңлатыу өсөн Е_________________ (“һис шикһеҙ” 10-сы һөйләмдә) файҙалана.

1) сағыштырыуҙар
2) яңғыҙлыҡ исемдәр
3) антонимдар
4) теркәүестәр
5) зат алмашы
6) инеш һүҙ
7) фразеологизмдар
8) бәйләүестәр
9) кәсер һандары

Яуап:

| А | Б | В | Г | Д | Е |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | | | |

*Башҡарылған эштәр инструкцияһына яраҡлы №1 ЯУАПТАР БЛАНКЫҺЫНА бөтә яуаптарығыҙҙы күсерергә онотмағыҙ.*

## 2-се өлөш

*Был эш төрөнә яуаптар өсөн №2 ЯУАПТАР БЛАНКЫҺЫН ҡулланығыҙ.*

25 Уҡылған текст буйынса инша яҙығыҙ.

Тексттың авторы тарафынан ҡуйылған бер проблеманы асыҡ итеп билдәләгеҙ. Билдәләнгән проблемаға үҙ комментарийығыҙҙы бирегеҙ. Тексттың төп фекерен билдәләү өсөн мөһим булған ике миҫал индерегеҙ (текстан артыҡ цитататалар ҡулланмағыҙ).

Автор (һөйләүсе) позицияһын асыҡ билдәләгеҙ. Уҡылған текстағы автор ҡарашы менән килешеү-килешмәүегеҙ тураһында яҙығыҙ. Ни өсөн килешеү-

килешмәүегеҙ тураһында аңлатығыҙ. Үҙегеҙҙең фекерегеҙҙе, иң беренсе сиратта, уҡыусы тәжрибәһенән, шулай уҡ белем һәм тормош күҙәтеүҙәренән сығып аңлатығыҙ (тәүге ике аргументты иҫәпкә алығыҙ).

Инша күләме – 150 һүҙ.

Тексҡа нигеҙләнеп яҙылмаған текст (тәҡдим ителгән тексҡа нигеҙләнмәһә) баһаланмай. Уҡыусы иншаһын бер ниндәй ҙә комментарий яҙмай, йөкмәткеһен йә тексты тулыһынса күсереп яҙһа, ундай эш **0 балға** баһалана.

Инша таҙа, асыҡ, аңлайышлы почерк менән яҙыла.